*Рамазан* ***ШӘҒӘЛИЕВ***

# КӘЛӘМЕМ, ҺИН ГЕНӘ МУРТАЯ КҮРМӘ

* * *

Булды заман, туған телемде быуҙылар.
Быуып, уны хатта Себергә ҡыуҙылар.
Килде заман, туған тел бик кәрәк икән,
Тик ул телде белеүселәр һирәк икән.

* * *

Дуҫлыҡ һарайын емереп, ватып бөттөк.
Бар байлығын урлап, емереп, һатып бөттөк.
Ватыр инек, һатыр инек нигеҙен дә,
Уға хаҡ биреүселәр юҡ ер йөҙөндә.

* * *

Ата-бабалар хыялына ирештек:
Айға мендек, диңгеҙ төптәренә төштөк.
Тырыша торғас, беҙ шуға барып еттек,
Ер йөҙөн атом сүплеге итеп бөттөк.

* * *

Унда һуғыш, бында һуғыш, ҡан ҡойош,
Ергә ҡарап ояла хатта Ҡояш.
Аяҙ көндә күкрәйбеҙ һәм йәшнәйбеҙ,
Әйтерһең, ерҙә беҙ мәңге йәшәйбеҙ.

* * *

Уралымды иммәй ниндәй һөлөктәр!
Һөлөктәр инде баҫтырыҡ кеүектәр.
Улар ҡасан имеп туйырҙар икән?
Әллә бер көн шартлап ҡуйырҙар микән?

* * *

Һәр шишмәнең үҙ тауышы, үҙ йыры бар,
Һыуҙарын ҡайҙа ҡойһа ла үҙ юлы бар.
Ә һинең, кеше, бармы һуң үҙ йырҡайың?
Ҡайҙарға илтә китеп барған юлҡайың?

* * *

Шишмә һыуын ҡойғас диңгеҙ һыуына,
Әйләнеп ҡараны килгән юлына.
Шул саҡ аңланы ҡайҙа ашыҡҡанын,
Ашығып, үҙенең юҡҡа сыҡҡанын.

* * *

Берәүҙәр үҙҙәре өсөн йән атҡанда,
Бер-береһен һатып баштарын ватҡанда,
Ул көйҙө, янды туған телкәйе өсөн
Һәм өҙгөләнеп бөткән Илкәйе өсөн.

* * *

Беләһеңме һин был сереп бөткән байҙы?
Һатһалар, һатып алырға әҙер Айҙы.
Ләкин уға ярҙам һорап керә күрмә,
Кереп, үҙеңдән һин үҙең көлә күрмә.

* * *

Наҙан наҙанды маҡтап телмәр тотто,
Йыйылышта булыусылар шаҡ ҡатты.
Беренсе рәттә ултырған ғалим да
Әйтер һүҙен онотто, телен йотто.

* * *

Ауылымда арта ташландыҡ йорттар,
Ул йорттарҙа кисен ҡабынмай уттар.
Ҡапҡаларын ел асып, елдәр яба,
Йөрәгемдән сөбөрҙәп ҡандар тама.

* * *

Бал көршәге: ”Мин бал көршәге”, — тип көн дә,
Кәштәнән һөрән һала ине һәр кемгә,
Бөгөн уға нимә булған, өнһөҙ ҡалған?
— Бөгөн уға кемдер тултырып тоҙ һалған.

* * *

Кисә, шулай, оло юлдан даға таптым,
Таянысы булған ул ниндәйҙер аттың.
Бөгөн шул ат ҡайҙарға юл яра икән?
Дағаһыҙ тояҡта нисә яра икән?

* * *

Урыҫтар ҡыңғырау ҡаға сиркәүендә,
Суҡынырға саҡырып һау-сырхауын да.
Ә башҡортом, донъя үҙгәрҙе, тип, тамам,
Юрғаны аҫтынан ҡарап ята һаман.

* * *

Ҡарап торҙом бер бәндәнең ат еккәнен,
Егә алмай нисек итеп интеккәнен.
Рәхәт булһа ла ул атта йөрөү, елеү,
Кәрәк икән әле уны егә белеү.

* * *

Маңлайымда һырҙар арта, артһын, әйҙә,
Ҡартлыҡ салғыйымдан тартһа, тартһын, әйҙә.
Тик, йөрәгем, һин генә ҡартая күрмә,
Һәм, ҡәләмем, һин генә муртая күрмә.

* * *

Әй, башҡортом, онотма кем булыуыңды,
Былай булһа, юғалтаһың ырыуыңды.
Һин хәмер менән дуҫлашып көн итһәң,
Урлайҙар бит ҡуйыныңдан һылыуыңды.

* * *

Әй, башҡортом, ҡайт берҙән-бер илкәйеңә.
Тәүләп тәпәй баҫҡан тыуған еркәйеңә.
Ата-бабалар төйәген ташлап китеп,
Хыянат итеп бөттөң бит телкәйеңә.

* * *

Әй, башҡортом, фани донъя малын ҡыуып,
Көн күрмәйһең ҡайҙа ғына уңып-туңып.
Байлыҡ өйөлөп ята бит Уралыңда,
Аңламайым йөрөүеңде аҙып, туҙып.

* * *

Әй, башҡортом, һуҙма ҡулыңды хәмергә,
Уны эсеп, тарыҡтың күпме йәбергә.
Күрәһеңме, иң аҫыл ҡыҙ-улдарыңды,
Ана, алып китеп бара ул ҡәбергә.

* * *

Әй, башҡортом, бер көн алып иҫкәйеңә,
Ҡайтмай түгел, ҡайтырһың һин Илкәйеңә.
Ләкин ул саҡ үкенһәң дә һуң буласаҡ,
Килмешәктәр хужа булһа еркәйеңә.